Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ

# Казанда Акмулла көнө

Ғинуарҙың, үҙенең “Һыуыҡай” тигән яманатлы ҡушаматынан арынырға теләгәндәй, берсә апрелдә хәтерләтеп, мәретеп, берсә марттай булып, иртәләрен шыҡырҙатып туңдырып, ни ҡыланырға белмәйерәк торған мәле ине. Шуға ла, Ҡазандан саҡырыу килеп төшкәс, нисек кейенергә белмәй аптыраңҡырап ҡалынылды. Әмәлгә ҡалғандай, беҙ юлға сығаһы көндө ҡапыл һыуытып ебәрҙе. Әйтерһең дә, иҫәпле генә көндәре бөтөп барғанда үҙе хаҡында февраль атлы алмашсыһының һүҙен хәтеренә төшөрҙө лә, ятып ҡалғансы, атып ҡал, тип, үҙ сәмен үҙе уятты ғинуар. Сәмләнмәҫ ерҙән сәмләнерһең! Ана ни тип әйткән ти бит шул февраль тигәне: “Ғинуар ғына түгелмен! Әгәр ҙә мәгәр ғинуар булһам, ҡарап тормаҫ инем: һыйыр мөгөҙөн һындырыр инем!” Йәнәһе, һыйыр мөгөҙөн һындырырлыҡ һыуытыр ине. Мөгөҙ тиклем мөгөҙҙө һындырырға ғәйрәтләнгәс, башҡаларға ниндәй хөкөм сығарыуы ихтимал икәнен күҙ алдына килтереү ҡыйын түгел. Бына шуға ла халыҡтың: “Йәйен юлға сыҡһаң, йылы кейемеңде онотма, ҡышын үҙең ҡарарһың”, — тигәнен иҫтә тотоп, әлегәсә кейеп йөрөгән еңел-елпе кейемдәрҙе ҡалдырып, йылыраҡ кейенешеп алдыҡ. Шулай итеп бер ҙә яңылышмағанбыҙ. Быға беҙ “Өфө—Чебоксары” тип яҙылған иҫке генә автобусҡа инеп урынлашыу менән төшөндөк. Сөнки өшөндөк. Тиҙҙән салонда ярайһы уҡ юғары тонда шундай диалогтар яңғырай башланы:

— Ниңә машинағыҙ һыуыҡ?
— Егерме йыл хеҙмәт иткән автобуста ҡайҙан йылы торһон?!
— Ниңә мейесе йылытмай?
— Иҫкергәнгә!
— Их, ҡайҙа үҙебеҙҙең “НефАЗ”ыбыҙ!

Юлда бер-ике урында туҡтаған арала ҡабалан-ҡарһалан эскән ҡайнар сәй генә йылындырырлыҡ түгел ине. Ирекһеҙҙән бер әкиәт хәтергә килде. Кейәү булаһы егеткә никах алды һынауы үткәргәндә, сатлама һыуыҡта уны тунһыҙ-ниһеҙ килеш кеше тормаҫ һалҡын өйгә бикләйҙәр. Әммә ул яйын таба: өшөй башлаһа, шунда ултырған ауыр таш бүкәнде күтәрә лә бүлмә буйлап йүгерә лә йүгерә... Шулай итеп, төбәп килгән тап ошо йорт ҡыҙын алырға тигән ниәтенең ҡаҡшамаҫлыҡ ныҡ икәнен иҫбат итә егет. Беҙ ҙә ҡалай итһәк иттек, пассажирҙар тарафынан “Һыуытҡыс” тигән ҡушамат алған Сыуашстан автобусында ун ике сәғәткә һуҙылған һынауҙы уңышлы үттек. Беҙ тигәнем — Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының йәш ғалимдары Рәшит Аҡкүбәков менән Фирҙәүес Юнысова һәм М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты Әхәт Вилданов менән мин фәҡирегеҙ ине.

Ҡунаҡтар сифатында Яҙыусылар берлегенән Ҡазан ҡарап юл алған Риф Тойғон менән Хәсән Назарҙың ундай һынауҙан азат ителеүҙәре йөҙҙәренә үк сыҡҡайны. Беҙгә иһә: "Волга"ла ғына елдергәндәрҙең эштәре башҡа-сараҡ шул..." — тиешергә ҡалды. Әммә уларҙың да беҙгә көнләшерлеге бар ине — ни генә тимә, Ҡыш бабайҙың күңеле булһын тип, тештәрҙе шаҡылдата-шаҡылдата Чебоксарының туҙған автобусында шығыр-шығыр елдерһәк тә, Ҡазан тупрағына беҙ уларҙан күпкә алдараҡ аяҡ баҫтыҡ.

Автобустан төшөп, аяғыбыҙ аҫтында Ҡазан ерен тойоуыбыҙ булды, юл аҙаптары шунда уҡ онотолдо. Сөнки унда беҙҙе дуҫтарыбыҙҙың йылы ҡосағы көтә ине. Бәләкәй генә төркөм булһаҡ та, беҙҙе хөрмәтләп, Ғәлимйән Ибраһимов исемендәге Тел, әҙәбиәт һәм сәнғәт институты директорының фән буйынса урынбаҫары, профессор Рәмил Исламов һәм уның ярҙамсылары ҡалаға ингән ерҙә үк ҡаршы алды һәм ҡунаҡханаға урынлаштырып, киске табын ойоштора һалып ебәрҙе. Ошондай ихлас-лыҡты беҙ конференция мәлендә лә, ҡала буйлап үткәрелгән экскурсия ваҡытында ла, хушлашыу көнөндә лә яҡшы тойҙоҡ. Шулай булғас был йылылыҡты нисек йылы ҡосаҡ менән сағыштырмайһың инде!

## ”Бүлешкәндән йырҙың бәҫе арта ғына”

Башҡортостан делегацияһы Ҡазанға ҡунаҡ булырға ғына килмәне. Беҙ Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 175 йыл тулыуға бағышлан-ған "Аҡмулла һәм хәҙерге заман" тигән ғилми конференцияға саҡырыл-ғайныҡ. Быңдай мәртәбәле саҡырыуҙы алғас та, ирекһеҙҙән бынан теүәл егерме биш йыл элек Аҡмулланың 150 йыллығы уңайы менән Өфөлә үткән ошондай уҡ конференция хәтергә килде. Ул саҡта бөйөк мәғри-фәтсебеҙҙең ижади мираҫына объектив баһа биреп, тик уның стиленә генә хас нескәлектәрен асыуға ҡарағанда, сығыштарҙа ла, дискуссияларҙа ла һүҙ башлыса "Милләте буйынса Аҡмулла кем булған?", "Аҡмулла ҡайһы халыҡтың шағиры?" тигән һорауҙар тирәһендәрәк барғайны. Хатта ошо тәңгәлдә ҡыҙыу ғына бәхәс тә ҡупҡайны. Шуға ла, йәшермәйем, әле лә шулай булмағайы, тип борсолоу менән керҙем конференция залына. Ҡайһы бер сығыштарҙа был юлы ла ундай ноталар сыңлай биреп ҡуйһа ла, дөйөм алғанда, хәл ул тиклем борсолорлоҡ булманы.

Конференцияны асҡан саҡта уҡ институттың директоры, яҡташыбыҙ профессор Ким Миңнуллин менән академик Мирҡасим Усмановтарҙың ауыҙынан яңғыраған телмәрҙәр сараның артабанғы эшенә тон бирҙе. Ким Мөғәллим улы, һүҙ был юлы ла әлеге һорауҙар тирәһендә ура-ланып ҡуймағайы, төп проблемалар ситтә тороп ҡалмағайы, тигән кеүек, үҙенең сығышында айырата баҫым яһап, шулай тине: "Тарихта олуғ шәхестәрҙең тәржемәи хәлдәренә бәйле ҡайһы бер ғибрәт алырлыҡ ҡыҙыҡлы факттар бар. Әйтәйек, антик юнан (грек. — ***Ә.С.***) шағиры Гомерҙы Смирна, Хиос, Колофон, Саламин, Родос, Аргос, Афина ҡалалары үҙҙәрендә тыуған тип иҫәпләйҙәр. Шәректең мәшһүр классигы Фир-ҙәүси фарсы телле байтаҡ халыҡтарҙың уртаҡ әҙибе булараҡ билдәле, танылған яҙыусы Саҙретдин Айниҙы тажиктар ҙа, үзбәктәр ҙә үҙҙәре-неке тип таный. Саят-Нованы әрмән, әзербайжан һәм грузин телдә-рендә ижад иткән шағир булараҡ беләбеҙ." Шул һүҙҙәре менән ул Мифтахетдин Аҡмулланың тик башҡорттоҡо, тик татарҙыҡы йәки тик

ҡаҙаҡтыҡы ғына булмауын, уның ижадын тик бер генә милләттең әҙәби хужалығына теркәп ҡуйыу уның рухын кәмһетеү ихтималлығын, өс халыҡтың да уны үҙ күреүен, Аҡмулланың улар өсөн “уртаҡ сифатында ҡаҙаныш яулаған мөхтәбәр заттарҙың береһе” икәнен нигеҙләне.

М.Усманов иһә тәүҙә ҡаҙаҡта Аҡмулла псевдонимы менән мәғлүм бер нисә шағир булғанлығын хәтергә төшөрҙө, “Аҡмулла” тигән ҡушамат ниндәй осраҡта тағылыуы хаҡында уйланыуҙары менән уртаҡлашты. Унан ғалим, күренекле текстолог һәм археограф булараҡ, Аҡмулланың шиғырҙарын баҫтырғанда лексикаға ҡағылмаҫҡа кәңәш бирҙе. Юҡһа, һүҙҙәр менән үтә ирекле эш итеү арҡаһында, оригиналдың йөкмәтке һәм поэтика йәһәтенән зыян күреүе ихтимал икәнен иҫкәртте. Ә инде шағирҙың ижады хаҡында һүҙ барғанда, һүҙҙе уның биологик сығышы тирәһендә ҡуйыртыу ғилми яҡтан бер ниндәй ҙә сиккә һыймауын билдәләне.

Институт директоры менән академикты тыңлап ултырғанда, уйҙарым мине ирекһеҙҙән 1971 йылдың йәйенә алып киткәндәй булды. Ул йәйҙә Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты проректоры, күренекле фольклорсыбыҙ Салауат Галиндың тырышлығы менән ошо уҡыу йортонда БАССР-ҙың һәм ТАССР-ҙың башҡорт, татар филологтарының ғилми конференцияһы уҙғарылғайны. Салауат Әхмәҙи улына рәхмәт! Бөрйән төпкөлөндәге тыуған ауылымда уҡытып йөрөгән мин фәҡирегеҙҙе лә иҫенә төшөрөп, ошо конференцияға саҡырғайны. Конференцияның икенсе көнөндә бөтәбеҙ ҙә Бүреҡаҙған тигән татар ауылына ҡунаҡҡа барҙыҡ. Ана шунда беренсе тапҡыр Фәтих Урмансы, Тәлғәт Ғәлиуллин тигән йәш татар ғалимдары менән танышыу форсаты тейгәйне. Бөгөн улар — исемдәре Ҡазандан йыраҡта ла мәғлүм фән докторҙары, профессорҙар. Тәүгеһе менән миңә фольклор ғилеме өлкәһендә хеҙмәттәшлек итеү бәхете лә тейҙе. Ленар Ямалетдинов — фән кандидатлығына, Хужи Мәхмүтов фән докторлығына диссертация яҡлағанда Тел, әҙәбиәт һәм сәнғәт институтының диссертация советы ултырыштарында ағза сифатында ҡатнашырға, Ким Миңнуллин докторлыҡҡа сыҡҡанда иһә беренсе оппонент рәүешендә сығыш яһарға насип булғайны. Һуңғы ике-өс йыл эсендә ошо советта үҙебеҙҙең биш аспирантыбыҙ — Гүзәл Әхмәтшина, Гөлнар Юлдыбаева, Илдус Фазлетдинов, Гөлназ Ҡотоева, Рәшит Аҡкүбәковтар фольклор буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлап, ул дәрәжәне алыу бәхетенә ирештеләр. Бының өсөн беҙ институт етәкселегенә, диссертация советына һәр саҡ рәхмәтлебеҙ. Киләсәктә лә бәйләнештәребеҙ өҙөлмәҫ, тип ышанабыҙ.

Табын мәктәптә әҙерләнеп ята ине. Ашнаҡсылар улай-былай иткеләгәнсе тип бер синыф бүлмәһендә гәп һатабыҙ. Татарстанда ғына түгел, беҙҙә лә исеме киң танылған әҙәбиәт белгесе Хәтип Усман үҙенә-үҙе ҡабатлай-ҡабатлай синыф таҡтаһына уңдан һулға, йәғни иҫке төрки графикаһында, Һаҙый Таҡташтың бер шиғырын яҙып тора. Шул саҡ остазым Кирәй Мәргән мине таҡта янына саҡырҙы ла ҡунаҡ профессор менән таныштырҙы.

— Хәтип дуҫ, бына был Сөләймәнов Әхмәт тигән Бөрйән егете булыр. Минең соискатель. Әле ауылда уҡытып ята...

— Һин, Кирәй, оппонент булырға яусылай торғанһыңдыр инде, моғайын, — тине Хәтип ағай.

— Уныһына барып еткәс, күҙ күрер әле, — тине лә Әхнәф Нури улы йәнә миңә өндәште: — танышып ҡуй: был ағаң Усманов булыр. Үҙебеҙҙең Ғәйнә ырыуы башҡорто...

Әхнәф Нури улы шулай тигәйне, Хәтип Усман:

— Ҡуй инде, Кирәй. Беҙ ҡайһы халыҡ мәҙәниәтенә хеҙмәт итәбеҙ, хәҙер уныҡы инде, — тине.

Конференция президиумында ултырғанда ошо хәтирәне күңелдән генә кисерә һалыуым бушҡа түгел, әлбиттә. Бәй, Хәтип Усман әйткән һүҙҙәр Ким Миңнуллин һәм Мирҡасим Усмановтар фекере менән ҡайһылай ҙа ауаздаш. Эйе, шағирҙың шәхесен дә, уның төп мөлкәте булған шиғриәтен дә "тик минеке генә" принцибынан түгел, быуа шул күҙлектән баһаларға кәрәк тә инде. Сөнки:

Бүлешкәндән йырҙың бәҫе арта ғына,
Күрше көлөн тартҡан һымаҡ усағыңа,
Барыһын да үҙ яғыңа тартма ғына,
Тәңре хаҡы — күршеңә таш атма ғына,
Яманлыҡҡа барып, бысраҡ яҡма ғына,
Ҡаҡҡан-һуҡҡан булыр, үҙең ҡаҡма ғына,
Ят бауырҙар ябырылһа, яҡла ғына,
Аҡмулланың аманатын һаҡла ғына.

Әммә был әйтелгәндәр: "Әйҙәгеҙ, Аҡмуллаға "Иван, не помнящий родства" йәки "ул бит без роду и без племени", тип ташлама яһайыҡ та, 1918 йылда комсомолдың III съезында В.И.Лениндың "Учиться, учиться и учиться!" тигән саҡырыу ташлауынан бик күп йылдар элек үк уның өҙөлөп-өҙөлөп милләттәштәренә: "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" — тип мөрәжәғәт итеүен дә, татар әҙәбиәтенең классигы Фәтих Әмирхан үҙенең шәкертлек йылдарында (1901—1902) яҙып барған көндәлектәрендә Аҡмулла шиғырҙарының күсермәләрен: "Мин мәкулат мелла Мифтахетдин бине Камалетдин әл-Башҡорди, эш-шәһиди, әл-мәләкъкаб би Акмулла рәхмәтуллаһи тәгаля (Аҡмулла ҡушаматлы, хаҡ эш өсөн үлтерелгән мулла Мифтахетдин бине Камалетдин әл-Башҡорди әҫәрҙәренән, Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте яуһын. — ***М.Ә.***)", — тигәнен онотайыҡ та ҡуйайыҡ тигәнде аңлатмай. (Был мәғлүмәт филология фәндәре докторы М.И.Әхмәтжановтың докладынан алынды).

## "Әҙәм камил булмайҙыр, ҡайнап бешмәй, Мөхәббәт туҫтағынан шарап эсмәй..."

Ҡазанға килеп төшкәс тә, Рәмил ҡусты: "Әхмәт ағай, Башҡортостан делегацияһы исеменән һүҙҙе Һеҙҙән көтәбеҙ инде," — тигәйне. Шул тәкдим буйынса конференцияны ҡотлаусылар рәтендә мин яһаған сығыш та иш янына ҡуш булды. Бына ул:

"Ҡәҙерле дуҫтар, ҡунаҡтар, ханымдар һәм туташтар вә әфәнделәр!

Башҡортостан Республикаһы делегацияһы мәшһүр сәсән шағирыбыҙ, мәғрифәтсе шағирыбыҙ, патриот һәм интернационалист Мифтахетдин Камалетдин улы Камалетдинов — Аҡмулланың тыуыуына 175 йыл тулыуға бағышланған Оло йыйынды ысын күңелдән тәбрикләй, унда ҡатнашыу бәхетенә ирештереүгегеҙ өсөн ихлас рәхмәтен күндерә һәм башҡорт, татар, ҡаҙаҡ халыҡтарының уртаҡ ғорурлығы булған ошо бөйөк

шәхесебеҙҙең яҡташтарының изге аманатын еткерә. Ә улар ошо йыйында ҡатнашыусыларҙың барыһына ла ҡайнар сәләмдәр күндереп вә изге теләктәр юллап ҡалдылар. Ошо аманатты ла ихлас ҡабул итеп алығыҙ!

Ҡәҙерле ҡор! Бөгөн беҙҙе бөйөк яҡташыбыҙ, татар әҙәбиәтенең классигы Ғәлимйән Ибраһимовтың исемен ғорур йөрөткән ошо изге ғилем йортоноң күркәм залына уртаҡ уйҙар, уртаҡ һөйөү, уртаҡ мөхәббәт йыйҙы. Мифтахетдин Аҡмулланың шиғриәтенә, шәхесенә, рухына булған уртаҡ мөхәббәт. Ошо урында ирекһеҙҙән шағирҙың мөхәббәт тәғлимәтен сағыу сағылдырған һүҙҙәре тел осона килә:

Әҙәм камил булмайҙыр, ҡайнап бешмәй,
Мөхәббәт туҫтағынан шарап эсмәй...

Шулай тигән Аҡмулла татар халҡының бөйөк улы Мәржәнигә бағышлаған мәҙхиәле мәрҫиәһендә. Тимәк, ошо йыйынға йыйылып, төрлө милләт балаларының бер ҡор булып ултырыуы — беҙҙең ни тиклем ҡайнап бешеүебеҙгә, тимәк, камиллығыбыҙға, оло мөхәббәткә хаҡлы булыуыбыҙға дәлил ул.

Аҡмуллабыҙға булған оло уртаҡ мөхәббәтебеҙ рәттән һуңғы ике йылда республикаларыбыҙҙа барған эшлекле сараларҙа, шул иҫәптән бөгөнгө йыйын йыйылыуҙа ла сағыу сағылыш тапты. Шул йөмләнән Башҡортостанда мәғариф эшмәкәрҙәре әҙерләүсе Башҡорт дәүләт педагогия университетына мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың исемен биреү хаҡында Хөкүмәтебеҙҙең ҡарар сығарыуына ла шул мөхәббәт сәбәпсе булды.

Шул һөйөү шағирҙың тыуған төйәге Миәкә районының, тыуған ауылы Туҡһанбайҙың танымаҫлыҡ булып яңырыуына, Аҡмулла шишмәһенең йәшәреүенә, йәм өҫтөнә йәм өҫтәп, яңыса аға башлауына сәбәпсе булды. Шул мөхәббәт М.Аҡмулла исемендәге вуз алдындағы Аҡмулла майҙанына ҡуйыу өсөн шағир һынын кәүҙәләндергән һәйкәл проектына конкурс иғлан иттерҙе.

Миәкә районында — Аҡмулла премияһы, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында шундай уҡ исемдәге стипендия, Аҡмулланың мемориаль бүлмәһе булдырылыуы, ошо уҡ вузда халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция, республика күләмендә башҡа бик күп саралар, шул иҫәптән Башҡортостан Фәндәр академияһы менән берлектә Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәгендәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының халыҡ-ара ғилми конференцияһы үткәрелеүе, китап күргәҙмәләре ойошторолоуы, шағир ижадына ҡағылышлы яңы баҫмалар донъя күреүе, мәктәптәрҙә Аҡмулла көндәре, аҙналыҡтар ойошторолоуы, шағирҙың тыуған төйәгендә башҡорт халҡының милли ғорурлығы булған “Урал батыр” атлы мәшһүр эпик ҡобайырыбыҙҙы башҡарыу буйынса йәш сәсәндәрҙең традицион бәйгеһе үткәрелеүе — бөйөк мәғрифәтсенең яҡты рухына тоғролоҡ билдәһе ул.

Хөрмәтле йыйын! Һөйөнсө алам: республикабыҙ Президенты Мортаза Рәхимовтың фарманына ярашлы, ошо йылдан башлап беҙҙә йыл һайын Аҡмулла көндәре үткәрелә башлаясаҡ. Һеҙҙе, ҡәҙерле туғандар, үҙебеҙҙә көтәбеҙ.

Туғандарым, йыйылғанбыҙ оло ҡорға,
Ығы-зығы, мәшәҡәтте ҡуйып ҡырға,
Хөрмәләргә хаҡ һүҙ әйткән хаҡ мулланың,
Пакланырға аҡ нурында Аҡмулланың.

Хистәр генә түгел, уй-теләк, фекер, изге ниәт-маҡсаттар ҙа, яҡты өмөттәр ҙә уртаҡ булһын!

Әйҙә, шулай була күрһен!”

Миңә ҡалһа, конференцияла яңғыраған байтаҡ сығыштар ошо маҡсатҡа тулыһынса яуап бирмәле булыуы менән ҡыуандырҙы.

## Татлы ҡалас һәм уның тишеге

Яҡташыбыҙ Рәмил Исламовтың “Мифтахетдин Аҡмулланың тормош юлы һәм ижади мираҫы” тигән доклады айырыуса йылы тойғолар уятты. Ул барлаған хеҙмәттәр араһында Ризаитдин Фәхретдинов, Сәғит Мирасов, Дауыт Юлтый, Әхнәф Харисов, Ғайса Хөсәйенов, Вафа Әхмәҙиев, Әхәт Вилданов, Рәшит Шәкүров ише башҡорт ғалимдары һәм әҙиптәренең ҡулы менән яҙылғандарының да булыуы күңелебеҙгә хуш килде. Докладсы татар, ҡаҙаҡ тикшеренеүселәре менән бер рәттән уларҙың да Аҡмулла ижадын өйрәнеүсе ғилемгә (акмулловедениеға) тос өлөш индереүҙәрен билдәләне. Мәҫәлән, остазым Кирәй Мәргән хаҡында ул былай тине: “1959 йылда Өфө ғалимы Кирәй Мәргән етәкселегендәге ғилми экспедиция тарафынан Аҡмулланың ҡәбере асыҡланыуы, әйтергә кәрәк, шағирҙың тәржемәи хәлен өйрәнеү йүнәлешендә ҙур ваҡиғаларҙың береһе булды,.. ҡәбер өҫтөнә ҡуйылған яҙыулы таштың яҡшы хәлдә һаҡланыуы әҙиптең генеалогияһы тураһындағы мәғлүмәтте яңы материал менән тулыландырҙы.” Докладсы был осраҡта ул ташта шағирҙың үҙ атаһының — Мөхәмәтйәр, тәрбиәләп үҫтереүсе атаһының Камалетдин мулла булыуы хаҡында мәғлүмәт теркәлгәнлеген күҙ уңында тотто, әлбиттә. Алғараҡ китеп, шуны әйтеп үтәйем. Сығыш һәм докладтар буйынса фекер алышҡанда, З.Зәйнуллин атлы бер әҙип, хәҙер ул ташты юҡ иткәндәр, тип бер башҡорт ғалимы баҡсаһына таш ырғытҡайны. Баҡһаң, ҡәбергә реставрация яһағанда уны Мейәстең тыуған яҡты өйрәнеү музейына алғандар, имеш.

Һүҙ барған теманы өйрәнеү тәңгәлендә Әхнәф Харисовтың эшмәкәрлегенә туҡталып, Р.Исламов уның хеҙмәттәрендә “шулай уҡ Аҡмулланың тормош һәм ижади эшмәкәрлегенең тейешле дәрәжәлә” яҡтыртылыуын билдәләне.

Конференцияла Аҡмулла шиғриәтенең тел үҙенсәлектәренә ҡағылышлы ҡыҙыҡлы ғына күҙәтеүҙәр менән уртаҡлашыусылар ҙа булды. Мәҫәлән, профессор И.Низамов “Татар риторикаһы һәм Аҡмулла” тигән доклад тәҡдим итһә, филология фәндәре докторҙары Д.Б.Рамаҙанова һәм Ф.С.Баязитова “Аҡмулла әҫәрҙәренең теленә ҡайһы бер күҙәтеүҙәр” һәм “Аҡмулла ижады һәм хәҙерге ерле һөйләштәр” тигән докладтар менән сығыш яһаны.

Мәғлүм булыуынса, Аҡмулланың күпселек шиғырҙары автограф хәлендә килеп етмәгән. Шуға ла тикшеренеүселәребеҙгә, нигеҙҙә, хәтерле информаторҙарҙан яҙып алынған, йәшерен-батырыны юҡ, улар тарафынан Аҡмулланыҡы тип аталған өсөн генә, авторлыҡты аныҡлау методикаһы тәңгәлендәге фәндең хәҙерге заман ҡаҙаныштарын файҙаланып та тормаҫтан, уныҡы тип иҫәпләнгән әҫәрҙәр менән эш итергә тура килә. Ә информаторҙарҙың башҡорт теллеһе ул әҫәрҙәрҙе — тик башҡортса, татар теллеһе, әлбиттә, — татарса, ҡаҙаҡ теллеһе үҙ телендә һәм һәр кем үҙ диалектының үҙе үҙләштергән һөйләшендә башҡарған. Аҡмулла

иһә үҙенең шиғыр һәм ҡобайырҙарын, хөрмәтле Мирҡасим Усманов иҫбатлауына ҡарағанда, "кәрәк икән — татарса, кәрәк икән — башҡортса, хәжәте килгәндә, саф ҡаҙаҡса һөйләй алған, яҙа алған, ихтыяж булһа, уларҙың өсөһөн бергә ҡушҡан"[1]. Шуға күрә лә Аҡмулла әҫәрҙәренең теле тураһында күҙәтеүҙәр яһағанда, Аҡмулла үҙе иҫән саҡта баҫылған һәм үҙ ҡулы менән яҙған шиғыр текстары табылған хәлдә лә, шуларҙы файҙаланып тормайынса, бары ул үлгәндән һуң ташҡа баҫылған әҫәрҙәрен күҙҙән кисереү менән генә сикләнеү ғилми йәһәттән дә, этика яғынан да, дөрөҫөрәге, ғилми этика кимәленән ҡарағанда, ауыҙ тултырып, тәнҡитте тулыһынса күтәрә ала, тип әйтергә иртәрәктер, моғайын.

Р.Ф.Исламовтың докладында әйтелеүенсә, 1892—2006 йылдар эсендә Аҡмулланың татар, башҡорт, ҡаҙаҡ, рус телдәрендә ун баҫмаһы донъя күргән, айырым антологияларҙа урын алған. Быларҙан тыш, әлбиттә, дәреслектәрҙә, йыйынтыҡтарҙа баҫылғылаған. Үҙе тере саҡта Аҡмулланың бер генә әҫәре, әлеге лә баяғы Мәржәнигә бағышланған мәҙхиәле мәрҫиәһе генә, Ҡазанда ташҡа баҫылған. Һәм, әлбиттә, башҡорт телендә түгел, ә татар телендә. Кемдәрҙер: "Ҡазанда кем уны башҡорт телендә баҫтырһын инде, әле лә ундай хәл осрамағанды!?" — тип әйтеүе ихтимал. Сәбәбе уға ғына бәйләнмәгән.

Башҡорттоң әҙәби тел нормалары, мәғлүм булыуынса, бары 1924 йылда ғына, унда ла ярым-ярты кимәлдә генә, ҡабул ителә башлай. Ни өсөн ярым-ярты кимәлдә генә? Сөнки ул башҡорттоң өс диалектының береһенә — көньяҡ диалектына, уның да Эйек—Юшатыр һөйләшенә, йәғни әсә телебеҙҙең үтә лә сикләнгән даирәһенә генә нигеҙләнә. Шуға күрә лә, И.Низамов әйтмешләй, "халыҡсан шағирға, сәсән-ораторға хас ғөмүми сифаттар"ға эйә булған Аҡмулла, үҙенең:

Ғилемең ҙур, йәшең өлкән аға булһаң,
Һөйләшеп ҡара һин бер энең менән, —

тип әйткән нәсихәтенә тоғро ҡалып, башҡортҡа телдән мөрәжәғәт иткәндә, уның үҙ һөйләшенең үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу менән бер рәттән, башҡа йырау һәм сәсәндәр һымаҡ уҡ, диалекттарҙан өҫтөн торған, йәғни бар төбәктәрҙә лә аңлашылмалы үҙенсәлекле әҙәби һөйләү телен киң файҙаланған. Диалекттан өҫтөн торған ул телде боронғо йырау һәм сәсәндәр ижады хасил иткән.

Кемдәр алдында сығыш яһаһа ла, Аҡмулланың, әйткәндәре яҡшы аңлашылһын өсөн, һүҙҙәрен аудиторияға яраҡлаштырыу һәләтен дәлилләүсе бер миҫал. 1894 йылда Өфөгә килгәнендә Аҡмулла мөфти хәҙрәт менән осраша, уға үҙенең шиғырын ишеттерә. Осрашыуҙы ойошторған һәм уға шаһит булған Ризаитдин Фәхретдинов бына ни тип яҙып ҡалдырған: "Аҡмулла, мөфти хәҙрәткә хитаб итеп, шиғыр һөйләне, һүҙҙәрен вә ыслубын мөнасиб (яраҡлы) килтерҙе"[2].

Шул килеүендә Аҡмулла Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев менән таныша һәм шиғыр уҡыуҙа ярыша. Уның шиғыр һөйләү оҫталығы хаҡында Р.Фәхретдинов шундай мәғлүмәт ҡалдырған: "Аҡмулла үҙенең шиғырҙарын моңло тауышы менән бер ҡәҙәр ҡәбиҙәт (ҡаушау) вә ғәйрәт менән һөйләне вә яҡшы ғына тәьҫир ҡалдырҙы"[3]. "Ғәйрәт менән" һөйләй алыу һәләте, әлбиттә, үҙенең шиғырҙарын яттан халыҡ алдында йыш һөйләүҙән, шул сәбәптән тауыш тембрының камиллашыуынан, көсәйеүенән, аудитория менән мөғәмәлә итеү һәләтенән килә. Бөгөнгө шағир-

ҙарыбыҙҙың аудиторияны тотоу һәләте хаҡында мәғлүмәте булған кешегә был һүҙҙәрҙең хаҡлығын аңлатып тораһы түгел.

Р.Фәхретдиновтың Аҡмулла хаҡындағы иҫтәлегендә, әле ҡағылған мәсьәлә күҙлегенән ҡарағанда, иғтибарҙан һис кенә лә ситтә ҡалмаған йәнә бер иҫкәрмә бар. Бына ул: “Үҙе, ҡаҙаҡ араһында йөрөп, яҡшы ғына ҡаҙаҡлашҡан булһа ла, һүҙендә артыҡ ҡаҙаҡлашмай, Бөрйән вә Үҫәргән башҡорттарынан айырмаһыҙ рәүештә һөйләшер ине”[4].

Сәсән шағир булһа ла, Аҡмулла үҙенең әҫәрҙәрен, мәғлүмдер ки, һөйләп кенә йөрөмәгән. Шул уҡ Р.Фәхретдиновтың геүаһлауынса, уның аҡҡа күсерелмәгән шиғырҙары “ҡалын бер жилдтә” (төпләнмәлә) һаҡланған булған. Р.Фәхретдинов: “Быны миңә ҡалдырып кит. Мин уны биазға (аҡҡа) күсертеп, баҫтырыу сараһын күрермен,” — тигәс, Аҡмулла: “Улай булһа, мин уны алып ҡайтайым да, үҙем аҡҡа күсерермен. Күсереү муафиҡ (кәрәкле) булмағандарын төшөрөрмөн, бәлки, бәғзе ерҙәрен арттырырмын,” — тип яуап биргән. Был уның үҙ әҫәрҙәренең яҙма варианттары өҫтөндә ҡайта-ҡайта ултырыуы хаҡында һөйләй. Шиғырҙарын аҡ ҡағыҙға төшөргәндә ул, әлбиттә, үҙ заманының традицияһына тоғро ҡалып, башҡа әҙиптәребеҙ кеүек үк, татар әҙәби телен файҙаланған. Автографтары һаҡланмауына ҡарамаҫтан, үҙе иҫән саҡта мулла Мифтахетдин бине Камалетдин әл-Башҡорди-Аҡмулланың татар телендә баҫтырып өлгөргән бары бер генә әҫәре — татар халҡының бөйөк улы Мәржәнигә мәҙхиә рәүешендә башланып, уның вафаты хәбәрен алғандан һуң, мәрҫиә рәүешендә тамамланған шиғыры ғына ла — шуға тос дәлил. “XIX быуат ахыры — XX быуат йөҙ башы татар әҙәби теле һәм Аҡмулла ижады” тигән докладында филология фәндәре докторы И.Б.Бәшированың тап ошо әҫәрҙе анализлауға өҫтөнлөк биреүе шуға ла һис тә осраҡлы түгел. Әммә был Аҡмулланың шул осор татар әҙәби телен яҙмала файҙаланған сүрәттә лә, әҫәрҙәрендә башҡорт лексикаһын ҡулланмаған, саф башҡорт телендә бөтөнләй ижад итмәгән тигәнде аңлатмай.

Шуныһын да әйтеп үтәйем, И.Б.Бәширова әйтмешләй, “өҫтөн, яҡшы холоҡло, инсафлы, намыҫлы, кешелекле тигән мәғәнәләрҙе бергә йыйып белдерә һәм ғалим кешегә ҡарата эпитет булараҡ ҡулланыла торған *фазыл* һүҙен автор персонажына (йәғни Мәржәнигә. — ***Ә.С.***) мөнәсәбәтле рәүештә ундан артыҡ” ҡабатлаған ошо әҫәрҙе ташҡа баҫҡанда, Ризаитдин Фәхретдинов әйтеүенсә, авторҙың кәйефен ҡырмалы хаталар ҙа ебәрелгән була. Өфөлә осрашҡан саҡта уның күҙе алдында Аҡмулла шул әҫәрҙең хаталарын төҙәтергә тотона (үкенескә ҡаршы, ул хаталарниҙән ғибәрәт булғандыр — башҡорт, ҡаҙаҡ һүҙҙәре татар теленә хас һүҙҙәр менән бирелгәнме, әллә һүҙҙәр төшөп ҡалғанмы, әллә шиғыр үлсәме үҙгәртелгәнме — беҙгә мәғлүм түгел), баҫманың “асыҡ урындарына бәғзе бер шиғырҙарын да” яҙа (“бәғзе бер шиғырҙарын” тигәндә, Р.Фәхретдинов “Мәржәни мәрҫиәһе”нә өҫтәмәләр яҙыуҙы күҙ уңында тотҡанмы, әллә өр-яңы шиғырҙар яҙғанын әйткәнме, хәҙер инде беҙ уны асыҡлай алмайбыҙ).

Аҡмулла әҫәрҙәренең теле хаҡында һәм, ғөмүмән, Аҡмулланыҡы тип нарыҡланған теге йәки был әҫәрҙең, ысынлап та, уныҡымы-юҡмы икәнен аныҡлау өсөн, ошо иҫкәрмәләрҙән тыш, бер үк әҫәрҙең төрлө телдә теркәлгәндәрен үҙ-ара һәм Аҡмулла үҙе иҫән саҡта ташҡа баҫылғандары менән сағыштырыу кәрәк. Объектив фекер йөрөтөп, объектив

һығымталарға килеү өсөн был ғына ла етмәүе ихтимал. Автор үҙе иҫән саҡта баҫтырған һәм шулай уҡ уның һаҡланып ҡалған үҙ автографтарын уға замандаш булған татар, ҡаҙаҡ, башҡорт әҙиптәренең теле менән сағыштырыу ҙа ҙур әһәмиәткә эйә булыр ине. Бының менән мин быға тиклемге тикшеренеүҙәрҙең бәҫен төшөрөргә теләмәйем. Эйе, Аҡмулланың ижадын төрлө яҡлап тикшерергә тырышыу — үҙе үк изге ниәт, изге эш. Ошо изге башланғыс артабан тағы ла һөҙөмтәлерәк үҫеш алһын өсөн, башҡорт, татар, ҡаҙаҡ белгестәренә (акмулловедтарыбыҙға) ҙур әҙерлек менән бер ҡорға йыйылып, мәсьәләне төрлө аспекттарында, төрлө методик алымдар ярҙамында тикшереп, уртаҡ фекергә килеүҙе лә ҡайғыртырға ине. Әгәр өс яҡтың диалектологтары — бер ҡорға, тел тарихы белгестәре — бер өҫтәл артына йыйылып, археографтар үҙ-ара күҙгә-күҙ ҡарашып ултырып һөйләшһә, текстологтар, әҙәбиәт тарихы ғалимдары, стиль һәм поэтика өлкәһендә тикшеренеүселәр, фонетиктар, лексикографтар, фольклорсылар һәм башҡалар шулай уҡ үҙ-ара фекер алышһа, иманым камил, материалға тотонмаҫ элек үк, уны нисек аңлатыуҙы маҡсат итеү (предвзятость) кеүек күңелһеҙ күренештәргә, күренеп торғанды күрмәмеш булып, күрше көлөн үҙ усағыңа тартҡан кеүек, үҙ яғыңа яраҡлаштырып, сәйәсәт буяуына мана-мана интерпретациялауҙарға, ҡарамаҡҡа — фәнни, асылында түлһеҙ иҫбатлауҙарға урын ҡалмаҫ ине. Аҡмулланың шиғырҙарында ара-тирә осраған *коток*, *ирән, саңкайып (йөрөү), япан, әре, сырак, кур, һаркыт, алаша* кеүек әле лә башҡорт телендә (йә уның һөйләштәрендә, фольклорҙа) әүҙем ҡулланылған айырым лексик берәмектәрҙең ерлеген, ошо телдә аша төшөп, тик ситтән, иҫке төркиҙән эҙләү кеүек үкенесле хәлдәр ҙә күҙәтелмәҫ ине. Аша төшөп тигәндән, әҙәби телдә *"койо"* һүҙен (Ялан-Ҡатай башҡорттарында — *оро)* минең үҙемдең ҡәүемемдең (Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуының) һөйләшендә *коток* тип әйтәләр. Ә *койо* беҙҙең яҡта — *баткак* тигәнде*, оро* ағастың төйөнөн, кешенең елкәһенә сыҡҡан биҙҙе, сәкән уйнағанда һуға торған ағас тупты аңлата. Шуның кеүек, *ирән — батыр, көслө, изге кеше; саңкайыу — башты артка ташлау; япан — ярты як, кеше аяғы баҫмаған ят як; әре — бал кортонаң бер төрө; сырак — яктылык өсөн кулайлама (төнөн, сыра яктыртып, балык сәнсеп алыуҙы сыракка төшөү тиҙәр, күсмә мәғәнәлә — күҙ нуры); кур — бал, кымыҙ, икмәк әсетеүсе баш (күсмә мәғәнәлә — болло булыу); алаша — бестерелгән ат малы; һаркыт — шарап, бал, буҙа кеүек үк иҫерткес эсемлек* тигән төшөнсәләрҙе бирә. Һуңғыһына миҫал. Иҙеүкәй Туҡтамыш хандан ҡасып киткәс, уны ҡыуып еткән хандың Янбай атлы батыры уға шулай тип инәлә:

Ҡайт, Иҙегем, ҡайтһана,
Ҡайт, Иҙегем, ҡайтһана!
Ҡайт, бер Иҙел кисһәнә!
Иле өлкән Аҡ урҙаға
Иңкәйеп сәләм бирһәнә!
Ап-аҡ алтын аяҡтан (туҫтаҡтан. — ***Ә.С.***)
Хан һарҡытын эсһәнә! [5]

Аҡмулла хаҡында һөйләшеү юбилей уңайы менән генә тоҡанып китеп, тағы һыуыныуҙан арынһа, башҡорттоң да, татарҙың да, ҡаҙаҡтың да Аҡмулла хаҡындағы фәне (акмулловедениеһы) ҡолаҡҡа ятмаҫ, туҙға яҙылмаҫ имеш-мимеш кимәлендәге "күҙәтеүҙәрҙән" азат булыр, килер

быуындар кинәнерлек өр-яңы кимәлдәге һәм уртаҡ фекерле Аҡмулла ғилеме барлыҡҡа килер ине. Аҡмулланың йөҙө Башҡортостанда — бер төрлө, Татарстанда — икенсе, Ҡаҙағстанда өсөнсө төрлө һүрәтләнеп, тотош алғанда, ул буддистар табынмалы күп йөҙлө Будданы хәтерләтә башланы. Уртаҡ фекергә килеү Аҡмулланың портретын ҡанунлаштырыуҙы ла еңеләйтер ине. Бәлки, шартына ҡарап, Мифтахетдиндың татар әҙәбиәте классигы Фәтих Әмирхан шәкерт сағында теркәп ҡалдырған “Мулла Мифтахетдин бине Камалетдин әл-Башҡорди” тигән исемшәрифтәрен тулы килеш ҡулланырғалыр? Ул саҡта Ризаитдин Фәхретдинов, Мирҡасим Усмановтар телгә алған ҡаҙаҡ Аҡмуллалары менән бутауға киләсәктә, бәлки, сәбәп ҡалмаҫ ине. Ошо әйтелгән теләктәр ҙә бойомға ашырылһа, ул сағында ҙур һәм татлы ҡаластың ейерлек ерен үҙе алып, ҡалғандарға уның тишеге һәм табаһы менән хушһынырға тәҡдим итеүгә оҡшаш эс бошорғос хәлдәргә урын да ҡалмаҫ ине. Һаман һабаҡ ала алмай ыҙа сиккән ундай киҫәүһеҙҙәр була ҡалһа, хәҡиҡәтте үҙ күргәндәр, мулла Мифтахетдин бине Камалетдин әл-Башҡордиға эйәреп:

Кесерәйтһәгеҙ, кесерәйергә мин яраймын,
Үҙегеҙ ҙурайырға яраһағыҙ, —

тип, тоғро һүҙен әйтә торор.

## Изге дуҫлыҡ — Ватан терәге

Конференция уңышлы тамамланды. Хужалар, ихласлыҡ күрһәтеп, ҡунаҡтар өсөн мәҙәни саралар планлаштырғандар икән. Рәмил Исламов етәкселегендә беҙҙең төркөм Кремлдә булды. Ҡазанға килә-китә йөрөгән арала, бында элек тә булған бар ине. Әммә хәҙер Кремль республика баш ҡалаһына 1000 йыл тулыу уңайы менән танымаҫлыҡ булып үҙгәргән. Ошонда уҡ Президент резиденцияһы урынлашҡан. Элек һалдат казармалары вазифаһын үтәгән ғәләмәт ҙур йортта хәҙер — Милли музей. Айырыуса Ҡол-Шәриф мәсете менән метро таң ҡалдырҙы. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә хасил булған был ҡоролмаларҙы ысын мәғәнәһендәге күркәм сәнғәт әҫәре сифатында ҡабул итәһең. Беҙҙе бигерәк тә уларҙың бер ҡарауҙа уҡ татар иленеке икәнен танытмалы итеп милли стилдә, йөкмәткеле итеп эшләнеүҙәре һоҡландырҙы.

Кисен беҙҙе Ғ.Камал исемендәге академия драма театры ҡаршы алды. Баҡһаң, татар туғандарыбыҙ Аҡмулланың 175 йыллығы уңайы менән конференцияла ҡатнашыусылар өсөн оло бүләк әҙерләгәндәр икән. Театр артистары көндөҙ нисәмә сәғәт теоретик яҡтан тикшереп маташҡан мәсьәләләрҙе сәхнәлә ҙур оҫталыҡ һәм нәфислек менән өр-яңынан асты ла һалдылар. Аҡмулла образының кәүҙәләнеше хәс тә конференциялағыса булды. Шуға күрә лә был кистә театр бер юлы ике сәпкә лә мәргән сәпәне сәнғәти уҡтарын. Ғилми конференцияла ҡатнашыусылар Ю.Сафиуллин сценарийы буйынса сәхнәләштерелгән был театраль күренеште, мәктәп термины менән әйтһәк, үтелгәнде ҡабатлау тип тә, шуға иллюстрация тип тә ҡабул итһә, конференция залында ултырырға яҙмағандар өсөн иһә ул ғилми форумда һүҙ ниндәй юҫыҡта барғанын популяр формала төшөндөрөү сараһы кеүек тойолдо. Спектакль алдынан сәхнәгә сыҡҡан Татарстан Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Илфак Ибраһимов, рес-

публика Премьер-министры урынбаҫары һәм мәҙәниәт министры Зилә Вәлиева, академик Миръҡасим Усмановтарҙың Аҡмулла ижады хаҡындағы фекерҙәре лә шуға булышлыҡ итте. Башҡортостан яҙыусыларынан сәләм күндереп, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хәсән Назаров залдағыларҙы үҙенең "Ҡәрҙәшлек" тигән шиғыры менән тәбрикләне:

Башҡортостан! Һин — ҡәрҙәшлек иле,
Миндә — аҫабалар улында —
Бер донъябыҙ моңо. Ваҡланыу юҡ,
Уйнап йәндең милли ҡылында.
Тарих риза Урал ҡуйынынан,
Ә кемгә һуң тарих ҡәҙерһеҙ?
Нәфсе менән тарлыҡ түбәнлеге,
Үрләй алмаҫһығыҙ хәҙер һеҙ!
Ваҡ йәндәрме маһайһындар өсөн
Ҡаһармандар рухты көсәйтте.
Айҡала ла йәнем сайҡала тик
Ишеткәндә "Һибелә сәсәк"те.
Һибелмәйек!
Төҫ тә,
көс тә беҙгә
Изге дуҫлыҡ — Ватан терәге.
Мәңге типһен күкрәктәрҙә беҙҙең
Салауат һәм Туҡай йөрәге.
Башҡортостан!
Һин — ҡәрҙәшлек иле.
Миндә — аҫабалар улында —
Бер донъябыҙ моңо. Йәнем фиҙа
Туғанлыҡ һәм иман юлында.

Зал башҡорт шағирын алҡыштар менән бүләкләне. Миңә ҡалһа, был ҡул сабыуҙар ҡунаҡтың күңеле өсөн генә сәпәкәй итеү түгел ине. Был алҡыштарҙа мин "Афарин!" һәм "Амин!" тигән хуплау һүҙҙәрен ишеткәндәй булдым. Моғайын, башҡаларҙа ла тыуғандыр бындай тойғо. Моғайын, шулайҙыр. Ошо тойғо беҙҙе ҡайтыу яғына тартылған оҙон юл буйы оҙатып килде. Артабан да ташламаһын ине ул беҙҙе.

**Аңлатмалар**

[1] Госманов М. Мифтахетдин Акмулланың ижаты һәм мирасы // Акмулла. Шигырьләр/ Төз., текстларны гыйльми әзерләүче, кереш мәк. һәм искәрмәләрне язучы Миркасыйм Госманов. Казан: Татар. кит. нәшр., 1981. 17-че б. (Цитата И.Низамовтың "Татар риторикасы һәм Акмулла" тигән докладынан алынды. Ҡар.: Аҡмулла һәм хәҙерге заман. Казан, 2007. 81-се б.).

[2] Фәхретдинов Р. Мифтахетдин бине Камалетдин бине Ишмөхәмәт // «Ватандаш»., 2006, № 7. 142-се б.

[3] Шунда уҡ. 143-сө б.

[4] Шунда уҡ. 141-се б.

[5] Иҙеүкәй менән Мораҙым // Башҡорт халыҡ ижады, 8-се том. Эпос: Иртәктәр һәм эпик ҡобайырҙар. Текстарҙы һайлап алып, томды төҙ., инеш мәк. һәм аңлатмалар авт., һүҙлек әҙерләүсеһе Әхмәт Сөләймәнов; яуаплы мөхәрр. Рауил Бикбаев. Өфө: Китап, 2006. 319-сы б.